## Шайтан себендәре

Бисмиллаһи рахман рәхим! Ләилаһи илләлла, мөхәммәт рәсүлуллала! Эй, хак мосолмандарым, был донъяла изгелек тә, яуызлык та тулып ятыр. Изгелек алланан булһа, яуызлык иблис-шайтандандыр.

Тыңлағыҙ, йәмәғәт, һеҙгә иблистең бер яуызлығын ғына һөйләп ишеттерәйем.

Бер сак шулай иблистең бөтә яраңдары тамук төпкөлөнә йыйылғандар ҙа, хужабыҙ ни кушыр икән тип, өнһеҙ-тынһыҙ калып, дер калтырап торалар, ти. Ә иблис үҙе, кара уйҙарын уйлап, оҙон тырнактарын сәйнәп, йылан һымак койроғо менән танауын мыҫ-короман таҙартып ултыра икән. Гонаһлы бәндәләр тамукта янып, гел генә мыҫ-төтөн борколоп торғас, быларҙың танау тишектәренә мыҫ-кором ултырып, иблис үҙе лә, шайтандары ла быға күнегеп бөткән була. Уларға был мыҫ-кором есе хатта төрлө хуш еҫтәренән дә татлырак икән.

Тамук төпкөлөндәге был тынлык әгәр ҙә мәгәр кешеләр йәшәгән ерҙә булһа, себен оскан тауыш та ишетелмәй, тиергә булыр ине. Әммә ләкин, мәғлүм ки, себендәргә тамукка инергә ярамағанлыктан,улар урынына унда төрлө мәхлүк-ярғанаттар ғына көн итә. Уларын ла, бындағы әҙәп-тәртипкә күнегеп бөткәнгә күрә, тамуктағы дәһшәтле гүр һиллеген боҙорға жыймайынса,үҙ баштарына төшөсөк ғәрәсәттән куркып, өнһеҙ-тынһыҙ ғына ултыралар икән.

Әгәр ҙә мәгәр аллаһы тәғәлә мәхлүге – ошо себен булмаһа, тамуктың үҙенә лә түҙеп торғоһоҙ был тынлыкты ни генә боҙор ине лә, кем башына ғына бындай зил-зәбәр кубыр ине икән,-быныһын хатта әйтеүе лә кыйын.

Эйе, биллаһи-валлаһи, тип әйтәм - бөтә бәлә бына ошо себен арҡаһында килеп сыға ла инде. Лә илаһи, ары тыңлағыҙ әле.

Тамуҡта һәр саҡ эҫе, түҙеп торғоһоҙ эҫе була. Бына шунлыҡтан, шайтандар һәр саҡ һылап-һыйпап торһалар ҙа, уның көмбәҙе сатнап-ярылып бөткән була. Ә себен тигән мәхлүгең, үҙегеҙ беләһегеҙ бит, һәр саҡ кәрәкмәгән тишек-тилеккә моронон тығыусан. Ул, кәһәрең, бында ни бар икән тип, хатта иң бәләкәй ярыҡҡа ла моронон тыҡмай тора алмай. Йыш ҡына уның былайтып төмөҫкөнөп йөрөүе үҙ башына булып сыҡһа ла, һәр ерҙә ни барын белмәйенсә, уның йәне түҙмәй.

Был юлы нәҡ шулай булып сыға ла инде. Тамуҡ көмбәҙендәге ярыҡты күреп ҡала ла, уның аҫтында ниҙәр бар икән тип, был шулай ярыҡ эсенә инеп китһә,тамуҡтың нәҡ үҙенә килеп сыға. Быны ахыры ни менән барып бөтәсәген дә уйлап тормай, туп-тура иблистең танау осона килеп ҡуна ла, үҙенә бөтөнләй ят урында соксоңоп, рәхәтләнеп тәпәйҙәрен йымырҙата башлай.

Тамуҡҡа эләккәнсе, бахырың, был донъяға тыумаһа ни булған да бит, яратылған хозай мәхлүге!.. Иблис шунда ырғып торған да былай итеп тороп - шап был мәхлүккә!..

- Был мәхлүк әле миңә килеп ҡунырға батырсылыҡ иткәнме?-тип, мығырҙапып, иблис был үлгән себенде әйләндереп-әйләндереп ҡарарға тотона.

Бөтә шайтандар ҙа шунда иркен һулап ҡуйлар. Уларҙың күкрәгенән атылып сыҡҡан был дәррәү һулыштан бөтә тамуҡ көмбәҙе дер һелкенеп ҡуйғандай була. Ҡотолдоҡ, тип уйлағандарҙыр инде, бахырҙарың.

Ә иблис үҙенең был бисара ҡорбанын бик оҙаҡ тикшереп ултыра торғас, ахырҙа ауыҙы ҡолағына еткәнсе йылмайып ебәрә. Йылмайыу тигәс тә, иблистең йылмайыуы ла шул үҙенсә инде: Ғасабы кешенең

Йөҙөн хәс көҙән йыйырғандай, ирендәре салышайып, сереп бөткән кара тештәрә ыржайып китә. Ә ул тештәрҙе мыжғып торған бихисап селәүсен корттар, үрмәкестәр вә ғәйре шундай хәшәрәттәр һырып алған икән.

Шайтан балалары, шатлыктарынан нишләргә лә белмәй, көсөк һымак сыйнашып, үрле-кырлы һикерешә, тас та тос килеп бер-береһен сәпәкәйләшә башлағас, иблис быларға:

- Әй, һеҙ, ү сеүсегеҙ, шайтан токомдары!- тип үкерә. Шайтан балалары, шунда ук койроктарын кыҫып, тишек-тиләккә боҫоп бөтәләр.

Иблис шунда, үҙ ниәтен белдереп:

- Шундай ук мәхлүкте мин үҙем хасил иткем килә, кайҙа, килтерегеҙ миңә бөтә кәрәк-яракты!- тип әмер бирә.

Бөтә нәмә "һә" тигәнсе әҙер була: көрөмө лә, көлө лә, күмере лә - бөтәһе лә уның алдында өйөлөп ята икән. Быныһ ише мөнәятты тамуктан сығып, ситтән эҙләп йөрөйһө юк бит инде. Иблис шунда ук эшкә керешә. Ул шул тиклем килештереп эшләй, хатта үҙ маһирлығына үҙе хайран калып тора. Тик был сөбөндәрҙең йәне генә юк икән: кыбырҙамайҙар ҙа, беҙелдәмәйҙәр ҙә, ти. Йәнә кара ғали йәнептәренең быға асыуы килеп, йәнә уйға калып ултыра был. Әммә, күп тә вакыт үтмәй, был үҙенең күректәй боғарҙағы менән бер өрөп ебәрһә, ни күҙе менән күрһен - шундай бер мөғжизә күрә. Ни булған, тиһегеҙме? Ары тыңлағыҙ, әй, йәмәғәт: иблистең был һаҫык тынынан ике йөҙләп сөбөне гөж килеп тора ла, уның үҙен һырып алып, корт һымак саккыларға керешә. Иблис, был дәһшәткә түҙә алмайынса, йән асыуы менән үкереп ебәрә.

- Күҙемдән юғалһындар, хәҙер үк юк булһындар,- тип илерә, ти, был.

Капыл шунда ығы-зығы куба: шайтандар ҙа, шайтан балалары

ла кый-сый килешеп, бөтәһе бергә был яңы яратылған сая мәхлүктәрҙе тамуктан тыуып сығарырға керешә.

Бына шунан бире был шакшылар, бөтә донъяға таралып, үрсегән һайын үрсеп, ер йөҙөн каплап алалар ҙа инде.

Шулай ҙа иблис үҙенең был уңышһыҙлығынан һуң аптырап калмай. Ул хатта үҙенең мәкерлелеге менән йыландан да хәтәрерәк берәй нәмә яратырға ниәтләп, йәнә эшкә керешә. Әммә ләкин аллаһы тәғәләнең көҙрәте киң, күҙе үткер шул: ул бөтәһен дә күреп-белеп тора.

Донъялағы барлык йән эйәһен яратыу эшендә алланың үҙе менән ярышырға йөрьәт иткән иблистең был хәсислеген дә ул тиҙ күреп ала. Шуға күрә ул үҙенең Ғазраил фәрештәһен донъяны шундай төрлө хәшәрәттәр менән тултырырға ниәтләнгән иблис менән алышырға ебәрә. Юкһа улар беҙ бисара әҙәмдәрҙе, был донъяла ла тынғы бирмәй, котоскос ғазаптарға дусар итерҙәр ине. Ярай әле, сығырынан сыккан был иблисте Ғазраил фәрештә вакытында тыйып кала. Шулай ҙа был шайтан себендәре донъяға таралып өлгөрә. Ул мәлғүндәр, әлеге көнгәсә, которған һымак, кешегә ташланып, тәкәтте корота. Ә хоҙай тәғәләнең үҙ себендәре йыуаш улар, кешене ул тиклем мәҙәләмайҙар, күберәк аш-һыу тирәһендә булалар: кайҙа икмәк, кайҙа калья, кайҙа кымыҙ, шул тирәлә генә йөрөй алла себендәре. Һәйбәт себендәр! Сағышмайҙар ҙа.

Һөйләр һүҙем шул ине һеҙгә, ағай-эне! Аллаға шөкөр!..

97

Аждаһа-йылан тураһында башкорттар һөйләүе

Халык телендә шундай бер хәбәр йөрөй.

Имеш, бынан өс йөҙ йылдар элек, Орский өйәҙенең I Бөрйән волосындағы Сибай ауылынан ун ике сакрымдай ғына ерҙә төрлө әкәм-төкәм мыжғып яткан һаҫык һыу өҫтөнән түңгәктәре сығып торған мүкле-күрәнле бәләкәй генә бер күтер була. Ә хәҙер был урында Култубән тигән өйәҙҙәге иң ҙур күл йәйелеп ята.

Был күл, имеш, күҙ асып күҙ йомғансы калкып сыккан. Күл буйында йәйләүҙә яткан башкорттар "аһ" итеп тә өлгөрмәгән, байтак ерҙе, яу баҫкандай, һыу баҫып алған, имеш. Шуға күрә уны башкорттар яугүл тип тә йөрөтәләр. Күлдең әйләнәһе ун ике сакрымдан да кәм булмаҫ. Йәй көндәрендә башкорттар күл тирәләй ат сабыштырғанда, сапкан аттары күрер күҙгә бер карайсык саклы ғына булып күренә. Күлдең тирә яғында тауҙар ҙа юк, ағас-маҫар ҙа үҫмәй. Шуға карамаҫтан, әйләнә-тирәлә бары тик һутлы куйы үлән каплаған тип-тигеҙ сикһеҙ дала ғына йәйрәп ятһа ла, карап торған кешегә күҙен дә айырып алғыһыҙ ниндәйҙер хозур күренеш кәүҙәләнә.

Әле мин һөйләйәсәк вакиға нәк ошо күл буйында була ла инде. Был хәлде минә уны үҙ күҙҙәре менән күргән кеше һөйләгәйне.

Бынан кырк йылдар элек, июнь айының бер көнөндә, иртәнге сәғәт ундар тирәһендә, йәйләүҙәге халыкты хайран калдырып, ап-аяҙ күктән эре ямғыр тамсылары һибәләй башлай. Күп тә тормай, йәшен йәшнәп, күк күкрәп ебәрә, уның артынса ук, койоп-котороноп, ямғыр катыш боҙ яуырға тотона. Сатыр-сотор килеп өҙлекһеҙ йәшен йәшнәп, күк актарылғандай күк күкрәп, күл буйындағы йәйләүгә күҙ күрмәгән, колак ишетмәгән ғәрәсәт кубып килә. Күп тә үтмәй, күктә бер кап-кара болот пәйҙә булып, күл өҫтөнә ябырылып төшә. Болот күлгә тейер-теймәҫтән, күл өҫтөндә тау-тау тулкын кубып, которо-

нөп ҡайнай, аҡғыра башлай. Күл һыуы бер күтәрелеп, бер буҫелеп, ярҙарына һыймай өйрәлеп йөрөй. Шул саҡ һыуҙан ағас түҫтәк дәүмәлендәге күҙҙәре аҡайып сыҡҡан ҡотоҫҡос бер ғифрит нәмәнең башы күренә. Быны бөтәһе лә бик яҡшы күреп тора. Сөнки башта бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр булырын көтмәгән кешеләр, был шомло урындан бер йөҙ сажиндай ғына ерҙә тороп, бөтә был ғәрәсәтте күҙәтеп һынап торған булалар.

Был ғифриттең башын ҡыҫып алған болот уның имәнес кәүҙәһен дә өҫкә күтәрә башлай. Уның кәүҙәһе йылтылдап торған ала-сола төҫтә була. Ахырҙа күлдән ғифриттең һәнәк йәбендәй ике ҡойроғо ла һурылып сыға. Ғифрит күл өҫтөнән арҡан буйындай күтәрелгәс, йылан һымаҡ борғаланып, һуҙыла, төрлө яҡҡа ҡойроҡтарын болғап, болот ҡыҫмағынан ҡотолмаҡсы булып, үрһәләнә башлай. Был шулай, борғалана-һырғалап торғас, ҡапыл, бөтә кешенең ҡотон алып, ларҫ итеп һыуға барып төшә. Шул мәлдә инде бөтә халыҡ, ҡурҡыштан ниҙләргә лә белмәй, йәйләүҙән ҡайһы ҡайҙа тырым-тырағай ҡаса башлай. Мал-тыуар ҙа ниндәйҙер афәт барын һиҙенеп, үкереп-кешнәп, өркөп-ҡурҡып далаға һирпелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, дәжжәл ҡупҡан тиерһең: кешеләр ҙә, малдар ҙа, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡандай, бергә буталып, бер-береһен этеп-төртөп, күҙҙәре аҡ-ҡара күрмәй, был мәхшәрҙән тиҙерәк ҡасып ҡотолоу яйын ғына ҡарай.

Ахыр сиктә , ығы-зығы килеп ауа-түнә ҡаса торғас,арып-арманһыҙ булып, бер ике-өс йөҙ сажиндай ер киткәс, артабан ни күрәһеләребеҙ бар икән, тип, туҡтап, артҡа боролоп ҡарайҙар. Үҙҙәре ҡоттары осоп, тештәре тешкә теймәй ҡалтырашып, бер-береһенә һүҙ ҙә ҡата алмайҙар икән. Бер аҙ иҫтәренә килеп, тын алғас, баш ҡалҡытып ҡарайһалар, күк йөҙөндә ҡайҙандыр пәйҙә булған тирмә дәүмәлендәй генә аҡ болот киҫәген күреп ҡалалар. Был болот та, ҡоштай осоп килеп, баяғыһы һымаҡ, йәнә күлгә уҡтала. Болот күл

Ҡеҙенә тейер-теймәҫтән, уныһы баҙғынан да былайыраҡ ҡоторонып, шашып-тошоп ҡына ҡалмай, үрә ҡарғып, күккә ашырҙай булып, ~~һыуын~~ һыуын үргә бырғый башлай. Урғылған һыу манараһы өҫтөндә йәнә теге ғифритте күреп ҡалалар. Болот уны, йәнә ҡыҫмаҡлап алып, туп-тура кешеләр өҫтөнә елдереп килтерә, ә ғифриттең ҡойроғо ергә һөйрәлеп, бураҙна ярып килә икән. Был хәлде күргән кешеләрҙең ҡоттары осоп, күбеһе иҫтән яҙып йығыла. Шулай уҡ миңә был хәлде һөйләгән Байыш ауылының кешеһе Ҡотлоәхмәт Уҫасовтың ҡатыны ла шунда йөрәге ярылып үлә.

x x
x

Болот ҡыҫмаҡлап алған ғифрит осоп барған ыңғайға йә үкергән, йә һыҙғырған, йә ыҫылдаған тауыш сығарып, ҡойроғон берсә тәгәрмәсләндереп, берсә ҡабырғаларына һуғып, үҙен-үҙе аямай, асырғанып, ҡалай ҙа болот ҡыҫмағынан ҡотолорға тырыша икән. Тик ниндәйҙер ҡөҙрәтле бер көс уның башын теләһә ниндәй ҡыҫмаҡтан да нығыраҡ ҡатҡып, уға хатта ҡыймылдарға ла ирек бирмәй, ти. Күпме генә көсәнеп, үрһәләнеп ҡараһа ла, был ҡыҫмаҡтан ҡотола алмайынса, ғифрит тора-бара күҙҙән дә юғала башлаған. Алыҫайған һайын кәүҙәһе ҡояш нурында һаман күркәмерәк булып, сағыу алтынһыу төҫкә инә барған.

Был ғифрит ҙур бер аждаһа-йылан булып, буйы алтмыш сажин, ә йыуанлығы ун ике ҡарыш самаһы булған, тиҙәр. Йәнә былай тип тә һөйләйҙәр: ябай йылан йөҙ йәш йәшәһә лә, йылан булып ҡала, йәше биш йөҙгә етһә, ул аждаһаға әүерелә, ә меңгә етһә, юхаға әйлә-

нә, имеш. Юхаһы инде әҙәм һүрәтенә лә, хайуан һүрәтенә лә - теләһә кем хиләфәтенә кереп йөрөй ала икән. Тик алла көҙрәте артаһында , күбсһе юха йәшенә етә алмай, ти. Өндәренә көлә яктыһы төшөү менән, уларҙы болот төшөп алып китә лә ете диңгеҙ арьяғындағы төрлө ғифрит-аждаһалар мыжғып ятҡан Ҡаф-тау артына илтеп бырактыра, имеш. Быға саклы әле ул ерҙәргә ен-бәрейҙәр, иблис-шайтандар хужаһы Гүршәсип батшаның улы Ҡаһармандан башка бер кем дә аяҡ баҫмаған, имеш, тиҙәр.

х х

х

Был яктарҙа ошоға окшаш хикәйәттәр бик күп.

Бер сак шулай Аһылай ауылындағы бер башкортка, ҡаҙан аҫыр өсөн, усак урынына бәләкәй генә сокор ҡаҙырға кәрәк була. Сирек аршиндай ҙа ҡаҙып өлгөрмәй был, ҡаҙған ерендә ниҙер ҡыймылдаған дай итә. Был, ҡото осоп, ситкә ятая. Бер аҙ вакыт үткәс, ҡаҙа башлаған сокорона туп-тура йәшнәп-күкрәп, елләнеп-дауыллаһып борғанаҡ болото төшөп килгәнен күреп ала. Шул мәлдә үк сокорҙан һыҙғырып-шыйылдап ҙур бер аждаһаның сығып килгәне күренә лә болот йөҫөгөнә табан тартыла башлай. Ауыл халкының быға саҡ әле бындай ҙур аждаһаны күргәне лә булмай. Күп тә үтмәҫтән, был ғифрит болотка олғашып, күккә күтәрелеп китә, бер ярты сәғәт самаһы үтеүгә, күк көмбәҙенә ашып, күҙҙән дә юғала. Ә аждаһа сыккан теге сокор урынында ҙур бер мәмерйә өңөлөп кала.

Һәр сак шулай, аждаһа сыккан һайын, бөтә нәмәне зил-зәбәр килтерерҙәй булып, күҙ асҡыһыҙ ел-дауыл куба, бер өҙлекһеҙ күк күкрәп, күҙ камаштырғыс йәшен ялтлап тора, күнәктән койғандай

койоп, боҙ катыш ямғыр яуа, тиҙәр. Шуға карамаҫтан, бындай ғәрәсәт вакытында аждаһа сыккан ер тирәһендә бер ниндәй ҙә зыян-каҙа булмай, уның карауы был тирәнән якын ғына урындарҙа ел-дауыл, бөтә көсөнә котороноп, йорт-каралтының кыйыктарын куптарып ташлай, тирмәләрҙе осороп алып китә, кибәндәрҙе, иген эҫкерттәрен туҙҙырып бөтөрә, кыҫкаһы, үҙенең бөтә ғәйрәтен күрһәтә икән.

x x

x

Былай тип тә һөйләйҙәр.

Урал ары
ғында, казак йәйләүҙәре менән сиктәш яңы линия буйындағы рус казактары торған Наследник станицаһы янында бер күл бар. Бынан утыҙ йылдар элек ошо күлдә бер имәнес ҙур йылан пәйҙә була. Йылан һыу эсергә төшкән мал-тыуарҙы кыра башлағас, был күлде кертеләп алалар. Ғәжәпкә күрә, ауыл халкының бәхетенә-мер инде, бер аҙ вакыт үтеү менән, был йылан юк була. Күрәһең, аждаһа йәшенә еткәс, уны болот күтәреп алғандыр инде.

# А ҫ ы л к ү л

Бай ҙа, данлы ла ул, Арыҫланхан.

Биләгән ерҙәренең теләһә кайһы яғына, якшы атка атланып, бер аҙна буйы елдерһәң дә, осо-кырыйына сығып етмәҫлек. Йылкы малының нисә баш икәнен белеү түгел, нисә өйөр икәнен дә һанап сыкмыһыҙ. Ә дала каплап йөрөгән ап-ак һарык көтөүҙәрен әйтеп тә тораһы юк: зәңгәр күк йөҙөндәге шәкәрә болоттар өйкөмдәй, иҫәпһеҙ- хисапһыҙ улар.

Арыҫланхандың береһенән береһе һылыу бисәләре лә күп. Шулай ҙа араларында иң һылыуы, иң һөйөклөһө лә бар, әлбиттә.

Әйе, бай ҙа ул, данлы ла Арыҫланхан.

Тик уның оҙо иң һылыу, иң һөйөклө бисәһе бүләк иткән берҙән-бер кыҙы – Аҫылкайы уға бөтә байлығынан да, данынан да кәҙерлерәк. Ул бер Арыҫланхан биләмәһендә генә түгел, ә бөтә ер йөҙөндәге һылыуҙарҙың һылыуы. Ҡоралай һымак һомғол, талсыбыктай буйсан, зифа. Аяккыналарн тиһегеҙме? Ике төпәйен һыңар усыңа ғына кыҫып тоторлок! Ә күҙҙәре? Көҙгө төҫләй, сем-кара. Аҫыл мәрҙән төҫлө балкып тора. Етмәһә, кыйылып киткән кыйғас каштар кайма-лап алған үҙҙәрен. Ә иренгенәләре? Тулышып бешкән сейә төҫлө! Йөҙө, иртән яуған кырпак карҙай ак, бит алмаларына ал таң нәфәге яғылғандай. Сылтыр төңкәләр, аҫыл таштар менән нағышланған кашмауы аҫтынан һомғол һынына һарылып төшкән оҙон сәс толомдары, ике кара йылан һымак ялтырай. Кескәй колак остарына таккан алтын алкалары яңы тыуған ай шикелле, күҙҙе иркәләй. Көмөш беләҙектәр менән биҙәлгән беләктәре аккош канатындай булһа, бармак төлгәшкәйҙәренең остарынан кына гөлдәре тамып торған төҫлө. Ә атлап йөрөүҙәре? Аккош йөҙөп килә, тиерһең! Ә инде туктап

калһа, ирнә елдән калғып торған буйсан камышты күр! Әгәр ҙә ул ауыҙ асып һүҙ һөйләһә, һөйләмә, тимә, үҙенән-үҙе наҙланып,шишмә шылтырай, тиң. Ә инде йыр йырлаһа, теләһә кем баҫкан еренән кыҙғала алмай, сихырланған һымак, катып калыр. Шундай ҙа һылыу ул,Аҫыл-кыҙ!..

x x

x

Бына йыйынға йыйылғандар. Бейек тау башы шығырым тулы халык. Арыҫланханға килгән кунактар улар. Сит-ят ерҙәрҙән саҡырылған хандар ҙа, уларҙың егеттәре лә бар бында. Данлы батырҙар,кыйыу, оая егеттәр менән бергә карт-королар ҙа, бисә-сәсәләр ҙә, кыҙкыркындар ҙа, бала-сағалар ҙа күп. Улар араһында тирә якка даны таралған Арыҫланхандың үҙе, уның бөтә бисәләре менән бергә һәр егеттең күңелен елкендергән һылыу кыҙы Аҫыл да бар,әлбиттә.

Батырҙар көс һынашадар. Ғәйрәттәрен, таҫыллыктарын күрһәтәләр. Мәргәндәр зыңлап торған әҙерңә-йәйәләрҙән алыҫтан тороп, мәрәйгә ук атышалар. Егеттәр, һыбай йөрөү оҫталыктарын күрһәтеп, бар халыкты хайран калдыралар. Тик һәр ярышта ибәтәйһеҙ бер хан улы каракаштың ғына алдына сыға алмайҙар. Уны бары бер ярлы һылыу егет Түләк кенә еңеп сыға.

Йыйындан һуң, кем белә, күпме вакыт үткәндер. Вакыт тигәнең бит береүҙәргә күҙ асып күҙ йомғансы, ә кайһы береүҙәргә бик акырын үтә...

Йыйындан һуң, Түләк үҙенең һөйгән айғырын менеп, кулына йәндәй күргән шласының кундырып, һунарға сыға. Алғыр бүре һымак, дала буйлап елдерә, тау-урмандар кыҙырып йөрөй. Шулай ҙа һунары бик сәйер уның: шласының кейек икта сөйә, ә кәрәк мәлдә сөймәй кала. Уйҙары бик алыҫта йөрөй шул уның. Жеүетле Арыҫланхан кы-

эынан башка, һылыуэар һылыуы Аҫылдан башка, бер кем дә кәшәй алмам, тип уйлай ул.

x x x

Ә Аҫыл бейәләр һауа. Тик һылыу байталы уға һис тә буй бирмәй. Аҫыл уға яҡыныраҡ килеп, ҡороғон һалайым ғына тиһә, уныһы ситкә ҡайырыла ла китә. Эхирәттәре инде ана ҡайҙа, алыҫта, тороп ҡалған, ә бурылы уны һаман алға әйҙәп, теге тека ҡаштаҡ аҫтына төшөп юрала.

Аҫыл, ҡоралай һымаҡ атылып, ҡаштаҡ башына менһә, уныһы инде елеҫ типһендә тора. Күрәһең, ялыҡҡандыр инде. Хан ҡыҙы тиклем хан ҡыҙын тыңламай ҙа булмай бит. Аҫыл уның эргәһенә килеп, ергә сүкәйеп ултыра ла, аҡҡош ҡанатындай йомшаҡ ҡулдары менән көмөш күнәгеп ҡуйып, хуш еҫле ап-аҡ һөттө һауа ла башлай. Тик үҙе һөттө итәгенә һауғанын һиҙмәй ҙә...

Анауында, аҡ тирмәләр эсендә, данлы атаһы, оло мәжлес ҡороп, ҡунаҡтарын һыйлағайны бит. Ә теге шул тиклем ибәтәйһеҙ улы Ҡаракаш менән бик алыҫтан килгән бай хан уның иң ҡәҙерле ҡунағы ине. Бик һыйлаштылар. Һыйларлыҡта шул. Һый ҡуп булғас ни. Ашап та, эсеп бөткәнһеҙ ине бит. Уйын-көлкө лә етерлек булды. Улар шулай ике аҙна буйы һыйландылар, күңел астылар. Хан үҙенең бөгөн һымаҡ улына, Ҡаракашҡа, һылыуҙарҙың һылыуы - Аҫылды ҡоҙалап ятты. Ә уның бөтә уй-хыялы бары тик Түләк кенә бит...

x x x

Сеү! Далала тояҡ тауыштары. Әйтерһең, ҡойон ҡотороноп килә! Аҫыл, аптырауынан һикереп тора ла һөтөн түгеп ебәрә, көмөш күнәге ҡулынан төшөп китә!..

Бына көйөн уның эргәһенә үк килеп туҡтай. Яҡшы аттан һелек-тәй егет һикереп төшә.

- һаумы, Аҫыл һылыуым! Ниңә аптырап ҡалдың? Минән башҡа кем шулай ҡоштай оса тип беләһең? Керешемдән осҡан уҡ та әле сәптә-яңылышканы юҡ. Көрәштә лә бил биргәнем булмаҫ. Мин бөтәһен дә еңеп сыҡтым, ә шулай ҙа һинән, һылыуым, еңелдем... Аҫылым, бә-хетем минең! - ти егет, ашҡынып.

Ҡыҙ ҙа уға алҡымына килеп тығылған йөрәк һүҙен әйтеп ҡалырға ашыға:

- Түләгем! Батырым! Яратам һине!- тип, күҙ йәштәренә төйөлә-төйөлә, егетенә һарыла.

х х х

Был көндән һуң күпме ваҡыт үткәндер, уныһын кем белһен? Ва-ҡыт тигәнең бит берәүҙәргә ҡуҙ асып йомғансы, ә берәүҙәргә бик аҡырын үтә.. Ә ғашиҡтар ҡауышҡанда, татлы төш һымаҡ ҡына ул. Аҙ ғына күрешмәйен ~~с~~/торһалар, бер-берәһен тындары менән тартып алырҙай, ә ҡауышҡанда - иҫтән яҙырҙай була улар. Аулаҡта тағы, тағы ҡауышалар. Төндәрҙән бер төндә, күктән йондоҙ һанашҡанда, яҡында ғына күҙҙәренә бер йомло шәүлә сағылып ҡала быларҙың.

Шул төндөң иртәһендә үк Арыҫланхандың әмере буйынса, далалағы өйөрҙән әле юғән дә теймәгән ике аҫау айғырҙы арҡанлап килтерә-ләр. Тотоп тыйғыныә, сапсынып, үрә ҡарғып торған аҫауҙар. Ә киҫкә табан ун биш егет ҡайҙалыр сабып сығып китә. Арыҫланхан-дың йөҙө ҡара яныл, һемһере ҡойолоп йөрөй...

Төн. Дөм ҡараңғы. Күҙгә энә төртһәң дә күренмәҫлек. Һыуҙар-ҙан һыуы Аҫыл тирмәһендә оло йәштәге ике еңгәһе йоҡлай. Оҙаҡ лабырҙашып ятҡандан һуң, гүр йоҡоһо менән хырлайҙар. Ә егет менән ҡыҙ аулаҡҡа сығырғаһүҙ ҡуйышҡан. Түләк таң атҡансы Аҫылын ҡая башында көтөп торасаҡ...

Ана, таң да һыҙылып килә инде. Аҫыл керпек тә ҡаҡмай ятҡан еренән шым ғына тороп, бесәй һымаҡ, аяҡ осторына ғына баҫып, тирмәнән сығып тая. Бына ул инде - ҡая башында, вәғәҙәләшкән урында. Тик Түләге генә , ниңәлер, юҡ та юҡ һаман. Күрәһең,ситтәрәк көтөп йөрөйҙөр. Тик һыҫҡырырға ярамай. Көтөргә кәрәк.

Сеү! Ҡая аҫтында тояҡ тауыштары, ат бышҡырған тауыш. Был ни булыр? Абау, быныһы атаһының тауышы түгелме? Шул!

- Аяҡтарын ҡойроҡҡа бәйләгеҙ. Хәҙер аттарҙы үҙ иркенә ебәрегеҙ. Һыҙырығыҙ...

Аһ, ҡамсылар шыйылдай!.. Өркән аттарҙың тояҡтары тыпырҙай. Ниндәйҙер шытырҙаған, ниҙер шартлап һынған өндәр артынса йөрәкте өҙгөс:

- Аҫы-ы-ы-ыл!!! - тип бәхилләшкән тауыш ишетелә. Аҙаҡ был тауыш тауҙарға ҡаҡлығып, шаңдау булып яңғырай ҙа, оҙаҡ-оҙаҡ һауала һарлығып тора...

x x x

Инде, ҡан тулы батмустай ҡыҙарып, көн дә тыуа. Ә Аҫыл һаман, йолҡҡоланған сәс толомдарын туҙҙырып, ҡая башында ята. Ул һаман тыйыла алмайынса, башын таштарға ороп, үкһеп-үкһеп илай, ҡара янып көйгән сейә төҫлө ирендәрен тешләй. Аҡҡош ҡанатындай беләктәрен ҡанға туҙҙырып, бармаҡ осторындағы кескәй ҡыналары менән талдай һомғол буй-һынын, ап-аҡ муйынын, түшкәйҙәрен сыйып-тыр-

нап бөтәргән...

Бына ул, иҫенә килгәндәй, яткан еренән талпынып тора ла, тәнтерәкләп, кая ситенә барып баҫа. Унда, аҫта, кан күләүеге боҫрап ята... Түләгенең каны... Күҙҙәрен йома ла, аккош канаттарын йәйеп, ул шунда һикерә:

– Хуш, якты донъя!..

Ә тегендә, дала киңлегендә, ике ярһыу аҫау айғыр, иртәнге елгә калғып ултырған кылғандарҙы йылы канға буяп, Түләктең икегә кайырылған кәүҙәһен һөйрәп, кайҙалыр алыҫка елдерәләр...

Иртән кешеләр йоконан торһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, кан күләүеге боҫрап яткан кая аҫтында зәп-зәңгәр ҙур бер күл барлыкка килгән була. Күлде, Аҫыл һымак матур булғанға күрә, Аҫылкүл тип атайҙар.

Был хәлдән һуң күпме вакыт үткәндер, уныһын кем белә? Вакыт тигәнең берәүҙәргә күҙ асып йомғансы, ә берәүҙәргә бик акрып үткән һымак. Әммә ул күл һаман да бар, уның хакында һаман да шул хикәйәтте һөйләйҙәр. Бәлки, бер заман Аҫылкүлдең эҙе лә калмаҫ, ә уның хакындағы хикәйәтте, моғайын, бер касан да онотмаҫтар.

## Бей-таш

Кәҫле заутының төньяк-көнсығышында ун ике сакрым алыҫлыкта ятҡан Оло Киҫәгәс күле арьяғында, Әүәләк күле менән Оло Рәпәйле күлдәре араһындағы сак кына калкыуырак тигеҙ ерҙә, бик ҙур бер һынташ бар. Ул таш бер нисә катлам гранит токомонан тора. Ел-ямғырға бирешмәгән вак күҙәнәкле өҫке катламдары эре күҙәнәкле йомшағырак катлам өҫтөндә ята. Күбекташ һымак эре күҙәнәкле аҫкы катламдары ел-ямғырҙан нығырак, ашалғанлыктан, таштың аҫкы яғы әллә күпме ярык- һырҙар, ора-кыуыштар менән ырылып, селтәрләнеп, бик сәйер төҫкә ингән. Сыуал һымак ошо кыуыштар таштың өҫкө яғындағы тишектәр менән барып тоташа. Шуға күрә лә был таштың кыуыштарын бесән сапкан, урак урған мәлдәрҙә аш-һыу әҙерләү өсөн әҙер усак итеп файҙаланалар. Таштың һерәйеп сығып торған япмалары ел-ямғырҙан һыыкланырға ла бик уңайлы.

Был ҙур таштың ситтәрәк ятҡан тағы бер киҫәге бар. Уныһы нәҙек аяклы бәшмәккә окшап тора. Бәшмәктең бейеклеге 10 фут самаһында булып, эшләпәһенең киңлеге лә шул самала, ә аяғының /һабағының/ калынлығы 60 футтан да артмаҫ. Алты-ете сакрымдан ук күренеп торған был таштарҙы бындағы рустар "Палатки" /"Япматаш"/ тип, ә башкорттар "Бей-таш" тип йөрөтәләр.

Уҙған 1887 йылдың декабрендә миңә был таштарҙы якындан күреп китергә насип булды. Мине был кыҙык таштар янына алып барған башкорттар:

– Касандыр, имеш, бик борон замандарҙа, был ерҙәргә әле рустар аяк та баҫмаған сактарҙа, ошо таш тирәһендә бер әүлиә карт йәшәгән. Ошо һарт карты башкорттарға:

– Минең ошо таш аҫтында ятыр һөйәктәрем серер бөтмәйенсә торор, был тирәләге ерҙе бер кемгә лә бирмәгеҙ, туйҙырыусы ер-

әсәкәйҙең йөҙөн йыртып, даланы һөрөп тә хур итмәгеҙ,- тигән васыят әйтеп калдырган, имеш.

Был замандан һуң күп вакыт үткән. Тора-бара был һәрт картының әйтеп калдырган васыятын да онотоп бөткәндәр. Хәҙерге башкорт карттарының ата-бабалары был ерҙе рустарга һаткандар. Тик шулай ҙа, был ерҙе һаткас та әле, оҙак вакыт уны һөрә алмайынса ыҙалангандар.

Имеш, һука менән тәүге бураҙнаны ярып сыккас та, һукасы үҙ артынан котоскос ыңгырашып, йөҙәрөктәрын болгай-болгай ыгерып килгән бер мәйетте күргән. Шунан һуң был ерҙе һөрмәҫ булгандар. Бер аҙ вакыт үткәс, икенсе бер кыйыу мужик килеп, йәнә һукага тошкән икән, йәнә шул ук хәл яңынан кабатланган. Зауыт приказчиктәре эшен ташлап каскан һукасыларҙы танк менән кыуып килтерһәләр ҙә, һәр береһе һукаһын ташлап касып китә торган булган. Шулай итеп, был хәл оҙак дауам иткән.

Тик көндәрҙән бер көндө әүлиәне зыярат кылыусылар, уның үҙ көҙрәте менән, кайҙа ятканын күреп калгандар ҙа әүлиә карттың һөйәктәрен кәҙер-хөрмәт итеп, кайҙалыр алыҫка, Ташкент далалары ягына илтеп күмгәндәр.

Әүлиә зыяратына килеп, дога кылыусылар, намаҙ укып, сәждәгә киткәндә генә был таш, имеш, уртага ярылып китә лә таш ярыгында уның бер ни ҙә булмаган мәйетен күреп калалар. Э таш шул ярылган килеш тороп кала, хәҙер ҙә әле шул хәлдә һаклана.

# <u>К и л е н т а ш</u>

Бисмиллаһи рахман рәхим!

Был хәл бик күптән, бик борон замандарҙа була, хатта аллаһы тәғәләнең бойроғо менән хәҙерге көндә ерҙә йәшәгәндәрҙең береһе лә хәтерләп еткермәй инде уны... Ул замандарҙа ерҙә иң бейек ағастарҙан да бейегерәк алпамыштар йәшәгән сак була.

Ана шул заманда һарттарҙың бер бейе йәшәй. Тәңре хоҙай тәғәләнең хәйер-фатихаһы менән көн иткәнгә күрәләр инде, йәшәй торғас, был бик байып китә. Байлығы уның көн һайын артҡандан арта бара. Мал-тыуары йылдан-йыл ишәйә торғас, ахыр сиктә был йылҡыларының иҫәбен дә онота. Ә һарыҡ-кәзәгә инде ул һан да юҡ. Күңеле тасан, ни теләһә, күпме теләһә, шуның саҡлы ашап-эсеп йәшәй бирә: һимеҙ бишбармаҡмы, бауырһаҡмы, һалмамы – ни теләһә, шул бар. Йәйен кымыҙының иге-сиге лә юҡ. Ә кымыҙ эскән туҫтаҡ-алдырҙары алтын да көмөштән генә. Был бей шулай имен-аман хилүәттә генә йәшәй бирә... Шулай ҙа, байлыкка батып, рәхәткә сумып йәшәһә лә, алланы онотмай. Бисәһе менән дә татыу ғүмер итә, уға артык ирек тә куйып бармай, теҙгендә генә тота. Үҙе уны бик тә яратҡан була. Бисәһе ҡартайғас, йәшерәк бисә алыуҙы уйлап та бирмәй, кәнизәктәр ҙә тотмай. Аллаһы тәғәлә уның яҡшылығын ярлыҡап, үҙенә батыр, тәҫкә матур, аҡылға зирәк, инсафлыҡта һирәк бер ул да бүләк итә быға. Улы үҫкән һайын ата-әсәһе уға кыуанып бетә алмай.

Шулай итеп, улдарын башлы-күҙле итер сак та етә. Байҙың ни, нәмә – уйлағаны – эшләнгән: бөтәһе лә "һә" тигәнсә. Быға үҙе һылыу, үҙе акыллы, үҙе бай бер йәш кәләш йәрәшеп бирәләр. Ҡалымы ҡалын булһа ла, байҙың балаһы ҡуйынға йөрәмәй бит ул. Йәш килендең артынан килгән бирнәһе лә ҡалымынан кәм булмай...

Былар шулай дүртәүләп, имен-аман, татыу ғына донъя көтә башлаҙар, дин-шәриғәтте изге күрәләр, көнөнә ете ҡат тәһарәт алып,

ете вакыт намаҙын да, көрьәнен дә вакытында укыйҙар. Бер һүҙ менән әйткәндә, бик тә тәкеүә булалар. Улар шулай байтак ғүмер итәләр.

Әммә ләкин ай аҫтындағы ер йөҙөндә бер ни ҙә даим түгел, бөтәһе лә фани был донъяла. Килен булдым – кәйнәгә яраманым, кәйнә булдым – киленгә яраманым, тигәндәй, бер көн килеп, быларҙың да кәмәһе комға ултыра. Кәйнә менән килен араһында һүҙҙән һүҙ сығып, ыҙғыш китә. Ундай хәлдәр хәҙерге көндә лә тулып ята бит.

Йәй көнө була был. Хәҙерге Әүәләк күле ятҡан ерҙә карт бей үҙенең тирмәһен ҡуя. Тирмәһе бының шундай ҙур була, был замандағы беҙҙең ише бәләкәй әҙәмгә уны уратып сығырға ғына ла ҡояш тыуғандан ҡояш байығанса тотош бер көн кәрәк булыр ине!..

Былар шулай яңы урынға килеп ултырғас ҡына бисә-сәсә араһында юктан ғына тауыш сығып китә. Монаятты татыу булешеү кыйын бит ул. Бигерәк тә бисә-сәсәгә ыҙғыш-талашка һылтау эҙләп тораһы юк. Быны да инде шайтан үҙе лә осона сыға алмаҫ. Ә тауыш тыңларға тиһәң, шайтанды куш: сакырмаһаң да, аяк аҫтында ул мәлғүнең! Кем хак, кем нахак, икәнен кем белә, бисәләрҙе, бер башлаһа, туктатып булама һуң? Һыйыр дулаһа, аттан яман бит ул. Карт бей тирмәнән сығып касырҙай була. Әйтһәң – һүҙ, төртһәң – күҙ, өҙмәйҙәр ҙә куймайҙар былар. Карт бейҙең алла алдында ғәйебе булғандыр, күрәһең. Бисәләрҙең теҙгенен бушатып, вакытында тыйып кала алмағас, аллаһ тәғәләнең асыуы килгәндер инде. Араларына улы кыҫылғас, былар бер аҙға тынып калһалар ҙа, был тынлык оҙакка бармаған. Шайтан котортомо, холоктары шулай булыптырмы, былар тағы низағлашырға керешкән: иртән дә әр, кис тә әр, үпкәләш тә талаш. Сәс йолкошорлоксе күпме генә кәрәк!..

"Юк, былай эш барып сыкмай,– тип уйлай карт бей,– быларға та-

тышып, гонаһлы булғансы ситкә китеп торғаның хәйерлерәк", тип, тирмәнән сыға ла күҙе күргән якка һыпырта был.

Бисәләрҙең, юкты бар итеп, оло хара янъял куптарыуын күреп торған аллаһы тәғәлә, хак мосолмандарының боҙоклокка төшөүен туктатырға итеп, асыуынан усактағы утка бер типкән дә:

- Һеҙгә минең хас дошмандарҙы ла яраштырыр оло бүләгемдең иҙгелеген күреү харам!- тигән икән, усактағы ут урынына шунда ук б бер күл пәйҙә булған. Ә хәҙрәтле алла хәһәрен күргән бисәләр шунда куркыштарынан таш булып каткан да куйған, ти.

Янъял шулай онотолоп калған. Тик үткәнде кире кайтарып булмай. Әйткән һүҙ ҙә, калған эш тә кире кайтмай шул. Аллаһы тәғәләнең бөтә асыуы менән бер өрөп ебәреүе була, тирмәнең дә көлө күккә оса, байлык менән тулы тирмәнең эҙе лә калмай.

Ют оскос ғәрәсәт купканын күргән бей артына боролоп караһа, тирмәһе урынында көтөрөнөп шаулаған күл тулкындарын ғына күрә. Карайып яткан күл өҫтөн ак күбек кенә каплап ята, ти. Ә ике як ярҙа ике таш һын ғына һерәйеп тора икән. Яҡшылабырак караһа: береһе - үҙенең карсығы, береһе - килене икән...

Әүәләк күленең ике як ярындағы ике таш һын - Бей-таш менән Килен-таш - бөтәһенә лә ғибрәт өсөн, хоҙай хәһәренең иҫтәлеге булып, ана шул замандан тороп калған, ти.